# «Изгелек иленә сәйәхәт»

Төҙөүсеһе: Яугильдина Г. Х.

Морак ауылы - 2019

-Балалар, һеҙ төрлө телдә һөйләшәһегеҙ, һеҙ төрлө илдәрҙән йыйылғанһығыҙ икән ти, күҙ алдына килтерҙегеҙме? Нисек бер-берегеҙҙе аңларһығыҙ икән? Бакһаң- кеше бер-береһен һүҙһеҙ ҙә аңлай икән. Яҡшы һүҙ, яҡшы мимика һәм жест ярҙамында бар нәмәне еңеп була.Бик алыҫта бер ил бар- унда яҡшы кәйеф, яҡшы тойғолар, мимика, жесттар йәшәй . Ул- Изгелек утрауы. Ә хужабикә- Изгебикә апай. Ул тик яҡшылыҡты ғына ярата, яҡшылыҡ тарата.Барғығыҙ киләме унда?Улай булғас-юлға!Тик унда бер бәлә булған- был утрауға Уҫалбикә ханым килеп турынлашҡан, бер кем дә унда бара алмай, ҡурҡа. Һеҙ ҡурҡмаҫһығыҙмы? Кем нисек уның йөҙөн күҙ алдына килтерә? Күрһәтегеҙ әле. Ә Изгебикә апайҙы?. Тик нимә менән бара алырбыҙ икән?Белдем, әйҙәгеҙ, ҡырҡаяҡ янайыҡ та китәйек.

**« Ҡырыҡаяҡ»** Бер бер артлы атлайыҡ, бер беребеҙҙән ҡалмайыҡ.

Если долго, долго, долго,

Если долго по дорожке,

Если долго по тропинке

Ехать, топать и бежать,

То, наверно, то конечно,

То возможно, то возможно

В страну Доброты нам попасть!

**Көҙгө тора.**

-Ой, нимә был?

«Мин-тылсымлы көҙгө. Кем изге һүҙ әйтә- шул ғына бынын үтә.»

**Уйын «Изге һүҙ»**

- Хәҙер үтһәгеҙ ҙә була. Хәйерле юл.
- Етәкләшеп атлайыҡ, юғалышып ҡуймайыҡ. Ой, бында-һаҙлыҡ. Ә был-ниндәйҙер хат. «Һаҙлыкты үтер өсөн- күпер яһарға кәрәк. Тик күпер ябай түгел- ултик яҡты һәм яҡшы төҫтәрҙән эшләнергә тейеш»
- Балалар, төҫлө ҡағыҙҙар киҫәктәрен алығыҙ, тик яҡтыларын һалығыҙ. Ниндәй төҫтә изгелек? Алдау? Ауыртыу? Матурлыҡ? Көлөү?Бәхет?Һаулыҡ?

**Күпер яһау.**

Был йәйғор төҫтәре һәр берегеҙҙен йөрәгенлә ҡалһын.Кешеләргә тик ошо төҫтәрҙе генә бүләк итегеҙ. Хәҙер атлағыҙ күперегеҙҙән.Ой, бында кемдер килә.. Ҡарап киләйем, ә һеҙ тик кенә тороғоҙ.

**Йыр « Шишмә»**

Фея;- Беләм, кемде эҙләйһегеҙ, тик тәүҙә минең менән уйнағыҙ. Мин шляпа һәм накидтамын, һеҙгә бик шатмын. Ултырығыҙ үләнгә. Яуаптар бирегеҙ миуә.

**Уйын « Күрһәт әле, дуҫҡайым».**

Фея :

Нисек асыуланаһығыҙ?

Нисек йылмайаһығыҙ?

Нисек талашаһығыҙ ?

Нисек дуҫлашаһығыҙ?

Нисек көләһегеҙ ?

Нисек һуғышаһығыҙ?

Нисек һаулашаһығыҙ?

Нисек инәйһе юл аша уткәрәһегеҙ ?

Нисек бесәйҙе иркәләйһегеҙ?

Нисек үсекләйһегеҙ?

Нисек әсәйҙе ҡосаҡлайһығыҙ? Ниндәй шиғырҙар беләһегеҙ?

**Шиғырҙар.**

Фея : Яҡшы, афарин, насар эштәр эшләй белмәйһегеҙ икән! Алға атлаһағыҙ ҙа була, хәйерле юл һеҙгә!

-Ниндәй йылы ҡояш, йомшаҡ ел... Әйҙә йырлап алайыҡ, күңелле булып китер.

**Йыр « Если с другом вышел в путь»**

-Ой, кәпме сәскә бында. Әйҙәгеҙ сәскәләргә әйләнәйек, сәскәләрҙе алайыҡ.

**Эт҅д «Сәскәләр»**

(«Мой нежный ласковый зверь».) «Закройте глаза и представьте, что на поляне растаял снег и появился первый цветок, а на нем прекрасный бутончик. Этот бутончик - каждый из вас. Он ещё закрыт. Но вот пригрело ласковое солнышко и бутончик начал раскрываться. Он раскрылся и стал прекрасным подснежником. Он греется под весенним солнышком, легкий ветерок раскачивает его. Солнышко! Куда оно идёт?

Туда и цветочек поворачивается. Но вот раздались чьи-то шаги. Это идёт человек. Он увидел прекрасные цветы и хочет их сорвать. Цветочки испугались, согнулись, лепесточки их задрожали, они уже представили себе, как завянут и засохнут. Но человек пожалел цветы, ведь они такие красивые, и пошёл дальше. И вот подснежники снова распрямились, ра_правили лепестки и от радости закружились в цветочном вальсе, греясь под ласковым солнышком. Вот какая история произошла с маленькими подснежниками. А теперь закроем глаза и превратимся в ребят» (считает до трех)

Яҡшыкәйефбай : Бик матур бейейһегеҙ, мин күрҙем.Мин төрлө кәйефтә булам, йә бойоҡ, йә күңелле, йә моңһоу, йә уҫал, кем ул мин? Әйҙә уйнап алайыҡ. Мин һүрәттәр күрһәтәм, ә һеҙ әйтегеҙ, ниндәй ул кәйефтә?( ҡояш, болот, ямғыр, йәшен, йылан, әсәй)Ана теге өҫтәлгә барығыҙ, красакаларҙы алығыҙ, сәскә тажын буяғыҙ, ниндәй кәйеф- шундай төҫкә. Шунан бер ҙур сәскә яһағыҙ.

**Бейеү « Күңелле бейеү»**

**Уҫалбикә инә.**

-Һаумыһығыҙ, малайҙар-ҡалайҙар, ҡыҙлар-илаҡтар!Мин- Изге бикә! Таныһығыҙмы?

Икенсе яҡтан Изге бикә инә.

Изге бикә;- Бына алдаҡсы, яуызбикә, был балалар бик яҡшы, изге, ярҙамсыл, һинең ярҙам уларға кәрәкмәй! Улар бында килеп еткёс- яҡшы һәм яманды айырып өйрәнгәндәр. Йылмайа һалығыҙ- яуызбикәне ҡыуығыҙ.

Хәҙер был илдә беҙ йыш булырбыҙ, бер кемде лә рәнйетмәҫбеҙ, тик яҡшылыҡ ҡылырбыҙ һәм гел дуҫтар булырбыҙ.

**Уйындар.**

**Күмәк бейеү.**